**Мәктәпкә әҙерлек төркөмөндә телмәр үҫтереү буйынса**

**“Әкиәт иленә сәйәхәт” темаһына дәрес конспекты**

**Программа йөкмәткеһе:** балаларҙы халыҡ ауыҙ-тел ижады жанры - әкиәт менән таныштырыуҙы дауам итеү, хәтер, уйлау һәләтен үҫтереү**.** Белем алыуға ынтылыш формалаштырыуҙы дауам итеү, балаларҙы үҙ- ара дуҫ булырға, татыу уйнарға өндәү, эшмәкәрлекә ҡыҙыҡһыныу уятыу, ихтирамлыҡ, дуҫлыҡ, ярҙамсыллыҡ сифаттары тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу:** сюрприз-мотивация өсөн йомғаҡ, ағастар макеттары: ҡайын, шыршы, уйынсыҡтар: ҡуян, айыу, мультимедиа проекторы, экран, таҡталар – 2шт, мольберт, ноутбук, әкиәтсе әбей өйөнөң макеты.

**Күргәҙмә материалдар:** тәбиғәттә үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре буйынса һүрәттәр, “Төлкө менән айыу” әкиәтенә коллаж, “Быҙау һәм төлкө” әкиәтенә предметлы һүрәттәр, экранда видеоөҙөк – терпе, урман һүрәте.

**Таратма материалдар:** емеш-еләк һәм йәшелсә һүрәттәре, көҙ миҙгеле буйынса һүрәттәр.

**Алдан алып барылған эштәр:** дидактик уйындар “ Емеш-еләктәрҙе таны”, ”Йәшелсәләр баҡсаһы ”, альбом ҡарау “ Был ниндәй әкиәт геройы ? ”, дидактик уйын “Көҙ миҙгеле тураһында һүрәт буйынса һөйлә”, ҡуян тураһында шиғырҙар, уйындар өйрәнеү, бармаҡ һәм өҫтәл театрҙары “Айыу менән төлкө”.

**Барышы:**

Төркөмдә балалар уйнап йөрөйҙәр. Кесе тәрбиәсе teләгән балаларҙы әкиәт тыңларға саҡыра. Балалар кесе тәрбиәсе менән сисенеү бүлмәһенә сығалар. Ҡалған балалар төрлө уйындар менән мәшғүлдәр. Шул ваҡыт тәрбиәсе төркөм бүлмәһенә йомғаҡ тәгәрәтеп ебәрә. Балаларҙың иғтибарын йомғаҡҡа йүнәлтә.

**Тәрбиәсе:** Балалар, ҡарағыҙ әле, был нимә ул? Тәгәрәп кенә килеп инде.
**Балалар:** Йомғаҡ килгән.

**Тәрбиәсе:** Эйе, тылсымлы йомғаҡтыр был *(тылсымлы йомғак нимәлер әйтә тигәнде белдереп, йомғакты ала ла ҡолаҡ эргәһенә ҡуя, йомғаҡ "әйткәнен" тыңлай).*

**Тәрбиәсе:** Йомғаҡ беҙҙе әкиәт иленә сәйәхәткә саҡыра икән. Унда беҙҙе әкиәтсе әбей көтә , ти. Юлда төрлө ҡаршылыҡтар осрар, зирәк, аҡыллы балалар ғына уларҙы үтәй ала, ти. Бының өсөн иғтибарлы булырға,уйлап эш итергә икәнде әйтә тылсымлы йомғаҡ. Ул юлды үҙе күрһәтәм, ти: ул ҡайҙа тәгәрәй , беҙ шунда барабыҙ. Балалар, һеҙ әкиәт иленә барырға ризаһығыҙмы?

**Балалар**: Эйе.

**Тәрбиәсе.** *Тылсымлы йомғак ты тәгәрәтеп ебәрә . Экранда урман һүрәте. Күңелле көй яңғырай.* Балалар, ана алыҫта урман күренә. Әйҙәгеҙ әле, урманға инер алдынан унда үҙенде тотоу ҡағиҙәләрен ҡабатлап үтәйек.

(*таҡтаға берәмләп һүрәттәр ҡуя*)

**Балаларҙың яуаптары**: (һәр һүрәткә ҡарап):

1. Урманда ҡысҡырып һөйләшергә, шаулашырға ярамай .

**Тәрбиәсе**: Ни өсөн?

**Балаларҙың яҡынса яуаптары**:

- Сөнки йәнлектәрҙе , ҡоштарҙы ҡурҡытырға мөмкин.
- Урманда ут яғырға ярамай, сөнки янғын сығып китеүе бар.
- Урман йәнлектәренә тейергә ярамай, сөнки улар урманда ғына йәшә ала.

**Тәрбиәсе:** Рәхмәт, балалар. Урман ҡағиҙәләрен бик яҡшы беләһегеҙ икән. Бер ваҡытта ла тәбиғәттә йөрөү ҡағиҙәләрен боҙмағыҙ.

Әйҙәгеҙ артабан юлланайыҡ.

(*йомғакты тәгәрәтә, йомғак ҡуян ултырған ерҙә туҡтай*)

- Ҡуян нигә илайһың?

**Ҡуян** (фонояҙмала тауыш**):** Нисек иламайһың инде, мине берәү ҙә яратмай , минең менән уйнамайҙар ҙа. Бәләкәйһең, тиҙәр.

**Тәрбиәсе**: Балалар, әйҙәгеҙ ҡуянды йыуатайыҡ. Уны маҡтайыҡ, йылы һүҙҙәр менән күңелен күтәрәйек. И-и-и, йомшаҡҡайым, илама.

**1- се эш.**

**Балалар** (*айырым – айырым йылы һүҙҙәр әйтәләр*) :

- <u>Матур һүҙҙәр әйтеү</u>**.**

(*Йомшаккай ҡуянҡай, йомшаҡбикә , матурым, бәләкәсем, үҫкәнем, аҡыллым, ҡуянкай- шеш ҡолаҡ*)

**Тәрбиәсе**: Ҡуянҡай, беҙ һинең турала шиғырҙа беләбеҙ. Әйҙәгеҙ, кем һөйләп ишеттерә?

*“Аҡ ҡуян” шиғырын һөйләү.*

**Тәрбиәсе:** Ә хәҙер бергәләшеп шиғыр һөйләйек.

**Балалар:** (*балалар шул шиғырҙы бергәләп, хәрәкәттәр менән ҡабатлайҙар*):

*Аҡ ҡуян, йомшаҡ ҡуян*
*Беҙгә ҡунаҡҡа килгән,*
*Ҡойроғо ҡыҫҡаҡ ҡына,*
*Ҡолағы ергә тейгән*

**Ҡуян (***фоноязмала тауыш***) :** Рәхмәт балалар, миңә күңелле булып китте, кәйефем күтәрелде. Минең дә һеҙгә күстәнәсем бар (кәрзингә һалынған кишер тапшыра)

**Тәрбиәсе**: Бына шулай, балалар! Гел шулай ярҙамсыл булығыҙ, яҡшы һүҙҙәрегеҙҙе бер кемгә лә йәлләмәгеҙ. Балалар, йомғағыбыҙ артабан юлға саҡыра (*тылсымлы йомғакты тәгәрәтә. Йомғаҡ айыу өңө янына килеп туҡтай*).

**Тәрбиәсе:** Ҡарағыҙ әле, был нимә ул?

**Балалар:** Айыуҙың өйө.

**Тәрбиәсе:** Ә айыу ҡайҙа һуң?

**Тәрбиәсе**: Балалар, ҡарағыҙ әле (*ҡулына алып*) айыу бик бойоҡ күренә миңә. Ә һеҙгә нисек? (*балаларҙың яуаптары*) Кем әйтә, нишләп айыу бойоғоп ҡына ултыра икән?

**Балалар:** Айыу йоҡоға әҙерләнә , шуға шулайҙыр.

**Тәрбиәсе**: Айыу ни өсөн йоҡоға әҙерләнә икән?

**Балаларҙың яҡынса яуаптары**: Сөнки көҙ етте, тиҙҙән ҡыш етә. Ә ҡыш көнө айыу йоҡлай.

**Тәрбиәсе:** Балалар, һеҙгә йоҡлар алдынан әсәйҙәрегеҙ әкиәт һөйләйме? (*яуаптар*) Әйҙәгеҙ, беҙ ҙә айыуға әкиәт һөйләп ишеттерәйек. Кем һөйләйем?

**2-се эш**

*Коллаж буйынса "Төлкө менән айыу" әкиәтен һөйләү.*

**Тәрбиәсе**: Тағы кем әкиәт һөйләргә теләй?

(Балалар *тағы ла сиратлап коллаж буйынса әкиәт һөйләйҙәр.*)

**Айыу (***фонояҙмала тауыш***):** Рәхмәт, балалар! Йоҡом бер ҙә килмәй ине, һеҙ әкиәт һөйләгәс, йоҡо килеп китте.

**Тәрбиәсе** (*шым ғына тауыш менән):* Балалар, айыу йоҡлап та китте (*айыуҙы өңөнә һала).*Эй, мут та булып сыҡты бит айыуыбыҙ. Беҙгә эш тә әҙерләп ҡуйған (*балаларҙы көҙ миҙгеле буйынса һүрәттәр һалынған өҫтәл янына алып килә* ). Хәҙер балалар ниндәй миҙгел ул?

*Балалар "көҙ", тип яуаплайҙар.*

**Тәрбиәсе**: Тәҡдим ителгән һүрәттәр буйынса көҙ миҙгеле тураһында һөйләгеҙ.

*Һүрәт буйынса һөйләү.*

**Тәрбиәсе:** Бына , айыуҙың эшен дә үтәнек. Афарин , балалар! Һәр миҙгел үҙенсә матур ул. Ҡарағыҙ әле, йомғаҡ артабан тәгәрәп китте (*йомғаҡты экран яғына ҡарай тәгәртә*).

**(***Экранда терпе тураһында ҡыҫҡа ғына өҙөк күрһәтелә. Терпе урманда япраҡтар араһында йөрөй***)**

**Фонояҙмала терпе тауышы:**Һаумыһығыҙ, балалар! Һеҙ урманда нимә эшләп йөрөйһөгөҙ?

**Балаларҙың яуаптары:** Беҙ әкиәтсе әбей янына китеп барабыҙ**.**

**Терпе:** Улай булғас, балалар, миңә ярҙам итегеҙ әле. Мин ҡышҡылыҡҡа емеш-еләк йыям. Ләкин улар йәшелсәләр менән аралашып бөттө лә ҡуйҙы. Айырып бирегеҙсе, зинһар!

**3 – сө эш**

*"Емеш-еләктәрҙе һәм йәшелсәләрҙе айырып һал"уйыны.*

*(балалар өҫтәлдә ятҡан һүрәттәр араһынан емеш- еләктәрҙе һәм йәшелсәләрҙе айырып кәрзиндәргә һалалар)*

**Тәрбиәсе:** Ҡарайыҡ әле, балалар дөрөҫ эшләнеләрме икән? **(***тикшереү***)**

**Терпе**: Рәхмәт, балалар. Мин һеҙгә бер кәрзин алма әҙерләнем.Ҡайтҡас ашарһығыҙ. Һау булығыҙ! Татыу булығыҙ! (*тәрбиәсе кәрзинде ала*)

*Тәрбиәсе йомғакты тәгәрәтә. Ул өй макеты янында туҡтай.* Бына беҙ килеп тә еттек , шикелле. Ә һеҙ балалар, түңәрәккә тороғоҙ ҙа күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ. Хәҙер йомғаҡ сере лә асылыр.

*(Балалар күҙҙәрен йома, тәрбиәсе Сөйөмбикә инәй образына* инә)

**Сөйөмбикә инәй:** Һаумыһығыҙ, балалар. Минең тылсымлы йомғағым да ҡайтып инде, һеҙгә юл күрһәтеп алып килгән икән. Балалар, һеҙ ҡайһы балалар баҡсаһынан килдегеҙ?

**Балалар:** Беҙ “Тирмәкәй”ҙән килдек.

**Сөйөмбикә инәй:** Нисек килеп еттегеҙ? Юлда нимәләргә осранығыҙ?

*(балалар юлда нимәләр осрағанын, кемгә ярҙам иткәндәрен һөйләйҙәр***)**

**Сөйөмбикә инәй:** Балалар , һеҙ әкиәт яратаһығыҙмы?

**Балалар:** Эйе, яратабыҙ .

**Сөйөмбикә инәй**: Улай булғас, тыңлағыҙ. Мин һеҙгә бик фәһемле бер әкиәт һөйләйем әле. Иғтибарлы булығыҙ.

*Мольбертка һүрәттәр ҡуйып әкиәт һөйләй***.**

-Борон – борон заманда йәшәгән ти төлкө менән быҙау. Бер ваҡыт урманда төлкөгә үлән ашап йөрөүсе быҙау осраған . Быҙау башын күтәргән дә төлкөнө үсекләй башлаған:

*Быҙау, быҙау кыйыш мөгөҙ, тумпаҡ баш!*

*Быҙау, быҙау кит бынан, әйҙә ҡас!*

Ә быҙау уға былай тип яуап биргән:

*Төлкө - төлкө,төлкөкәс!*

*Һин хәйләкәр, алдаҡсы!*

*Һин ҡурҡыныс, ҡараскы!*.

Төлкө илап ебәрә һәм йүгереп өйөнә ҡайтып китә.

Балалар, әйҙегеҙ , аҙағын бергәләп һөйләп бөтөрәйек. Артабан нимә булған икән?

**Балалар төрлөсә фаразлай**: Төлкө әсәһенә ошаҡлаған. Уны әсәһе әрләгән. Уға насар һүҙҙәр әйткән.

Әсәһе төлкөнө һәйбәт итеп тыңлай һәм һорай:

- Ә һин уға берәй насар һүҙ әйтмәнеңме?

Төлкө, оял ып ҡына, әйттем, тигән.

- Күрәһеңме, һин дә быҙауҙы рәнйеткәнһең.

**Сөйөмбикә инәй:** Балалар, әйтегеҙ әле, төлкө дөрөҫ эшләгәнме? Ә быҙау ?

**Баллалар**: Юҡ, дөрөҫ түгел. Үсекләшергә ярамай. Дуҫ булырға кәрәк.

**Сөйөмбикә инәй**: Афарин,балалар бик оҡшанығыҙ миңә. Бына хәҙер мин һеҙгә һүрәттәр бирәм. Шуларға ҡарап, кешеләр бер-береһе меәнән нисек аралашырға тейеш икәнен һөйләп бирегеҙ.

**4-се эш**

*Һүрәттәр буйынса тәртип ҡағиҙәләрен һөйләү.*

“Үсекләшергә , әрләшергә ярамай. Насар һүҙҙәр әйтергә ярамай. Дуҫ йәшәргә кәрәк”.

**Сөйөмбикә инәй:** Афарин, балалар! Татыу булырға кәрәк. Уйынсыҡтар менән бүлешеп уйнағыҙ, үсекләшмәгеҙ. Ул насар ғәҙәт. Бер-берегеҙҙе, ололарҙың әйткәндәрен тыңлағыҙ. Һеҙгә ҡайтырға ла ваҡыт еткәндер инде. Тиҙерәк ҡайтып етер өсөн мин һеҙгә тылсымлы балаҫымды бүләк итәм. Һә тигәнсе ҡайтып та етерһегеҙ. Һау булығыҙ, балалар!

(*Балалар хушлашып балаҫҡа ултыралар, күҙҙәрен йомоп тылсымлы һүҙҙәр әйтәләр: Сим-салабим, ос балаҫым! Шул арала “Сөйөмбикә” тәрбиәсегә әйләнә.*)

**Тәрбиәсе**: Бына ҡайтып та еттек, балалар!

(*кесе тәрбиәсе балаларҙы ҡаршы ала, балалар нимә күргәндәре тураһында һөйләйҙәр* )

**Кесе тәрбиәсе**: Балалар, арығанһығыҙҙыр инде. Ҡулдарығыҙҙы йыуығыҙ ҙа, күстәнәстәр менән тамаҡ ялғап алығыҙ (*балалар ҡулдарын йыуалар ҙа алма ашарға ултыралар*).